Байрам менән, иптәштәр!

Бөтә илдәрҙән пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Эҫемәт БАЙРАҒЫ

Газета 1931 йылдың 1 ноябрәнән сыға

Башҡорт АССР-ы КПСС-тың Хәйбулла район комитеты һәм халыҡ депутаттарының район Советы органы

№ 51 (6490) 1988 йыл, 30 апрель, шәмбе Хаҡы 3 тин.

Беренсе Май атлай ил буйлап

Тиҫҙән бөтә ҡитғалар хеҙмәтсәндәренең Халыҡ-ара теләктәшлек байрамына теүәл бер быуат буласаҡ. 1889 йылда II Интернационалдың Париж конгресы ҡарары менән Америка властары тарафынан вәхшиҙәрсә баҫтырылған Чикаго эшселәренең 1886 йылдың 1 Майындағы сығыштары тураһындағы иҫтәлек мәңгеләштерелде.

Был көндө хеҙмәт кешеләре изелеүгә ҡаршы, тыныслыҡты һаҡлау, социаль тиңлелек өсөн көрәштә берҙәмлектәрен күрһәтә. Миллиондарса хеҙмәтсәндәр Беренсе Май демонстрацияларына «Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!» тигән лозунгы менән сыға.

Совет иле Беренсе Майҙы йәмғиәтебеҙ тормошоноң бөтә өлкәләрендә революцион үҙгәртеп ҡороу шарттарында ҡаршылай. Традиция буйынса, хеҙмәт байрамын билдәләп, башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһала. Биш йыллыҡтың өсөнсө йылы тотош ил буйынса халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында продукция етештереүҙең яңы үҫеше, төҙөлөштә, тимер юл транспортында һәм башҡа тармаҡтарҙа эш күләмдәренең артыуы менән билдәләнде. Шуныһы яҡшы, быйыл промышленность продукцияһының 60 процентын күберәге тулы хужалыҡ иҫәбе һәм үҙүҙенде финанслау принциптарында эшләүгә күскән предприятиелар тарафынан етештереләсәк.

Беренсе Май колонналарының берҙәм сафтарында районыбыҙ хеҙмәтсәндәре лә үҙҙәренең ҡаҙаныштарын күрһәтә. Улар Бүребай руда идаралығы, Хәйбулла геологоразведка партияһы, автотранспортсылар, элемтәселәр, 3-сө төҙөлөш идаралығы, МПМК, бөтә предприятие һәм ойошмалар коллективтарының һәм айырым эшселәрҙең Беренсе Май байрамына ҡарата әҙерләгән хеҙмәт бүләктәрен ҡәнәәтләнеү менән ҡабул итте.

Ауыл хужалығы эшсәндәре быйылғы Беренсе Майҙы айырыуса күтәренкелек менән билдәләй. Күпселек колхоз һәм совхоздарҙың малсылары дәүләткә ит һәм һөт һатыуҙың беренсе квартал заданиеһын уңышлы үтәне, йәмәғәт малдарының продуктлылығын күтәреүҙе һәм һанын ишәйтеүҙе тәьмин итеп, ҡышлауҙы уңышлы тамамлай.

Район игенселәре яҙғы байрамды, ҡаҙнаҙа булараҡ, баҫыу өҫтөндә ҡаршылай, «Яҙғы көн йылды туйҙыра», тигән халыҡ әйтемен иҫтә тотоп, уңай ваҡытты ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырыша. «Хәйбулла», «Таналыҡ», «Маҡан» совхоздары, Фрунзе исемендәге колхоз механизаторҙары баҫыуҙарҙа дым ҡаплауҙы ҡыҫҡа срокта тамамланы. Сиратта иң яуаплы осор — яҙғы культуралар сәсеү. Район эшсәндәре ағымдағы биш йыллыҡтың өсөнсө йылында мул уңыш йыйып алыуға өмөт тота. Үҙ-үҙеңде финанслау һәм сығымды үҙ килемең менән ҡаплау шарттарында бөтә колхоздар һәм совхоздарға ла еңелдән булмаясаҡ. Етештереү резервтарын тулыһынса файҙаланғанда, ойошҡанлыҡ һәм дисциплина юғары булғанда, бөтә ресурстарҙы хужаларса һәм экономиялы тотонғанда ғына уңышҡа ирешергә мөмкин. Бөтә белгестәр, партия ойошмалары, совет, профсоюз һәм комсомол органдарының ирәнбары фәҡәт шуға тупланырға тейеш. Хужалыҡтарҙың экономикаһы күтәрелһә, күп кенә социаль мәсьәләләрҙе хәл итеү мөмкинлеге тыуасаҡ, аҙаҡ килеп, ул илебеҙҙең дөйөм үҫешенә, ер йөҙөндә тыныслыҡты һаҡлап алып ҡалыуға ярҙам итәсәк. Быны онотороға ярамай.

Быйылғы хеҙмәт байрамы XIX Бөтә Союз партия конференцияһын лайыҡлы ҡаршылау шарттарында билдәләп үтелә. Илебеҙҙең хеҙмәт коллективтары, эшсәндәре социализм өсөн көрәш юлында бөтә ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу ихтыяры менән тулы.

Яҙ байрамы — Беренсе Май көнө менән һеҙҙе, ҡәҙерле иптәштәр!

УЛ — ТӨҘӨҮСЕ

«Башмедьстрой» трәсының 3-сө төҙөлөш участкаһында тырыш, эшһөйәр кешеләр аз түгел, шуларҙың береһе — Булат Ғибәт улы Ҡоҙабаев.

Аҡъяр урта мәктәбенең 8-се класын тамамлап, 292-се ПМК-ның столяр цехына эшкә килгәндә уға 15 йәш тә тулмаған ине.

Булатҡа хеҙмәт юлын бик иртә башларға тура килә. Шулай итеп, 1969 йылда ул төҙөүсе булып китә. Тәүҙә балта оҫтаһы булып эшләй, биш — алты йыл үткәс, А. М. Сафиндың ташсылар бригадаһына күсә.

Квалификациялы мастер Афраним Муллағәле улынан ташсы һөнәренең нескәлектәрен өйрәнә. Ҡайһы берәүҙәр, бәлки, төҙөүсе һөнәре абруйлы түгел, тип уйлай торғандыр. Ләкин Булат фәҡәт ошонда үҙенең урынын таба. Төҙөүсе хеҙмәтенең ниндәй ҙур әһәмиәтеҡ эйә булыуын ул яҡшы аңлай.

— Тырыш, бары тик мактауға ғына лайыҡлы, — тип һөйләй уның тураһында бригадир. — Эшен ереләп үткәрә, сифатлы итеп үтәй. Иптәштәре араһында абруйлы. Тыныс холоҡло, баҫалҡы.

Булаттан, ниндәй объекттар төҙөүҙә ҡатнаштыҡ, тип һорағайным, ул район ауылдарындағы балалар баҡсалары, мәктәптәр һәм йорттарҙы әйтеп үтте лә, бер ни тиклем тын ҡалып, 18 йыл эсендә төҙөлгәндәрҙең барыһын да һанап үтеү мөмкинме ни, тине. Шул уҡ ваҡытта үҙ һөнәре өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисергәнлеге һиҙелде.

Юғары производство ҡаҙаныштары өсөн Булат Ғибәт улы Ҡоҙабаев «Социалистик ярышта еңеүсе» знаҡтары, төҙөлөш идаралығы, трест, КПСС райкомы һәм райсовет башҡарма комитетының Почет грамоталары менән наградланған. Яңыраҡ уның Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Почет грамотаһы менән наградланыуы тураһында хәбәр ителгәйне инде.

Булаттың үҙе тураһында артыҡ һөйләгеһе килмәне. Иптәштәре менән осрашҡан саҡта мин уның былтыр бик ауыр ҡайғы кисереүен белдем, хеҙмәт алдынғыһының ғаилә тормошона ҡағылырға теләмәгәйнем. Ул мине ғәфү итер, тип уйлайым. Эш шунда: былтыр йәй ҡатыны ҡапыл ғына донъянан китә, балалары әсәһеҙ тороп ҡалды.

Хәстәрлекле ата кеше балаларын ҡайғыртып, эштән буш ваҡытын улар менән үткәрә. Иртә тороп балаларҙың ашарына әҙерләргә, уларҙы мәктәпкә оҙатырға, кистәрен дәрестәрен тикшерергә тура килә. Өй мәшәҡәттәре әҙме ни ул.

Алдынғы төҙөүсе, хәҙер инде иҫемә бөтә республикаға таралған Булат Ҡоҙабаев бына шулай йәшәй һәм эшләй. Һүҙемде йомғаҡлап, уны Беренсе Май байрамы менән ҡотлайым.

А. АҠҠУЖИН.

ҺҮРӘТТӘ: Б. Ғ. Ҡоҙабаев.

В. УСМАНОВ фотоһы.

Килограмдан күберәк

Фрунзе исемендәге колхозда дәүләткә ит һатыуҙың беренсе ярты йыллыҡ планы 151 процентҡа үтәлде, 607 центнер ит һатылды. Башмаҡтар ит комбинатына уртаса 400 килограмм ауырлыҡ менән оҙатылды.

Илдар һәм Әлифә Бохарбаевалар дөйөм эшкә тос өлөш индерҙе. Ғаилә звеноһы башмаҡтар һимертеүҙә эшләй. Апрелдә заданиелағы 900 урынына тәүлегенә уртаса 1123 грамм артым алынды.

Малдар һимертеүҙә — С. Ҡоҙабаев менән Н. Ҡолсонбаев, үҫтереүҙә Р. Байҡуҡаров тырышып эшләйҙәр.

Ф. СОЛТАНҒУЖИН,
колхоздың партбюро секретары.

ХЕҘМӘТ БҮЛӘГЕ

Бүребай руда идаралығының механика цехы коллективы Беренсе Май байрамын яҡшы хеҙмәт уңыштары менән ҡаршылай. Төп һөнәр эшселәренең күбеһе. Хеҙмәтсәндәрҙәң халыҡ-ара теләктәшлек көнө хөрмәтенә хеҙмәт вахтаһына баҫып, апрель буйына руда идаралығының башҡа цехтары заказдарын ваҡытында тапшырырға йөкләмә алды. Цехта үҙ эшенең оҫталары бик күп. Беренсе Май байрамы алдынан ойошторолған социалистик ярыш һөҙөмтәһендә уларҙың сафы нығыны.

Бында йәштәр һәр ваҡыт алда килә. Улар араһында комсомолец Салауат Ҡолғарин айырылып тора. Ул — V разрядлы токарь, үҙ һөнәренең оҫтаһы. Заказдарҙы гел сифатлы итеп, ваҡытында үтәй. Уны коллективта хөрмәтләйҙәр. Салауат яҡшы эшсе генә түгел, руда идаралығының йәмәғәт тормошонда ла актив ҡатнаша, төҫлө металлургия работниктары профсоюзы өлкә комитетының ағзаһы итеп һайланған.

Пышыусы Айса Килдебаев, сварщик Михаил Семенихиндар ҙа үҙҙәренең байрам алды социалистик йөкләмәләрен тултырҙы. Улар йыл башынан алып айлыҡ заданиеларын 160—170 процентҡа еткереп, яҡшы сифат менән үтәй.

И. ҠОҘАБАЕВ.

Байрам вахтаһында

САЛАУАТ исемендәге колхоздың күп кенә механизаторҙары, малсылары Беренсе Май байрамына хеҙмәт бүләктәре әҙерләне.

Хужалыҡта баҫыу эштәре киң колас ала бара. Фәлиәхмәт, Аҡнаҙар һәм Урыҫбай бригадалары механизаторҙары сәсеүлектәрҙең бөтә майҙандарында дым ҡаплауҙы тамамлай.

Икенсе бригаданан механизатор Фәрит Сәйетов баҫыу эштәренең тәүге көндәренән алып ырамлы эшләй. ДТ-75 тракторында ул заданиеһын көн һайын арттырып үтәй. Эш сифаты һәйбәт.

Икенсе бер механизатор — Фәнил Фәрхәзов шулай уҡ еңеһыҙғанып эшкә тотондо. Ул Аҡнаҙар бригадаһында Т-4 тракторы менән ер тырмата, смена нормаһын көн һайын 110—115 процентҡа еткереп үтәй.

Урыҫбай фермаһынан профилакторий бығау караусыһы Нәфисә Торопколова юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә. Ул һәр баш малдан тәүлегенә уртаса 800-әр һәм унан да күберәк артым ала. Бығауҙары һау-сәләмәт һәм теремек булып үҫә.

Г. БАЙҒУСҠАРОВА,
колхоздың ВЛКСМ комитеты секретары.

◆ *Идеология фронты боецтары*

Ауыл активистары

Федоровка ауыл культура йорто ошоға тиклем бөтә йүнәлештәр буйынса ла арттағылар рәтендә төрҙо. Эш планлы рәүештә алып барылманы, художестволы үҙешмәкәрлек эшләмәне, ауыл халҡы, шулай уҡ йәштәр ауыл культура йортона һирәк йөрөнө, сөнки улар унда күңелһеҙ икәнлеген белә ине. Партия ойошмаһының, Федоровка ауыл Советы башҡарма комитетының йәштәрҙе йәлеп итергә тырышлыуы һөҙөмтәһеҙ булды. Барлыҡ кәмселектәр клуб эше белгесенең юҡлығына ҡайтып ҡалды.

Шул ваҡытта урта мәктәпте тамамлаусылар араһынан һәләтле йәштәрҙе Стәрлетамаҡ культура-ағартыу училищеһына уҡырға өйрәргә ҡарар иттем. Сажиҙә Сынбулатованың ултырыштарҙа араһында төрлө түңәрәктәрҙә актив ҡатнашыуы менән айырылып тороуын белә инек. Ауылдаштары уның оҫта бейеүенә һәм йырлауына һоҡланып бөтә алманы. Ул шулай итеп тамашасыларҙың хермәтен яуланы.

Комсомолка С. Сынбулатова махсус уҡыу йортон тамамлап тыуған ауылына ҡайтты. Бөгөнгө көндә ул Федоровка ауыл культура йортонда художество етәксеһе булып эшләй. Эшләй тип әйтеү генә еңел. Сөнки ул барыһын да юҡтан башланы. Иң тәүҙә клуб активын тупларға ҡарамаҡ ине, был осраҡта ул ауыл йәштәренең ирҙамына таянып ҡына ҡалманы, ә әлегерәк сәхнәлә сығыш яҡаған активистарҙы ла йәлеп итте. Бының өсөн билдәле бер ваҡыт талап ителде, лә̧кин Сажиҙә башлаған эшен ташламай. Культура йорто директоры, комсомолка, агитатор Любовь Беляева уның ышаныслы ирҙәмсеһе булды.

Кистәрен клуҫта уттар ҡаҡ һүнмәй. Йәштәр тәүҙә берәм-берәм, ә һуңынан төркөмләп килә башлай. С. Сынбулатова менән Л. Беляева уларҙың һәр береһен художестволы үҙешмәкәрлектә ҡатнашырға өгөтләй. Кешеләрҙең эштән һуң үҙәре өсөн ял итеү шарттарын булдыра алыуҙарына ышаныс тыуҙырырға тура килде.

Нәш белгестәрҙең тырышлыҡтары бушҡа булмай. Уҡытыусылар балалар баҡсаһы работниктары, механизаторҙар, малсылар художестволы үҙешмәкәрлектә ҡатнашырға килә, ҡайһы бер пенсионерҙар ҙа теләк белдерә. Улар араһында ҡурайсылар, баянистар, бейеүселәр, йырсылар ҙа табыла. Ә ҡайһы берәүҙәрҙең бер нисә музыка инструментында уйнай белеүе асыҡлана.

Шулай итеп, ауыл халҡы алдында концерт номерҙары менән сығыш яһау мөмкинлеге тыуа. Һәм күптән түгел Әбүәәкир ауыл культура йортонда концерт күрһәтелде. Тамашасылар концертты яратып ҡараны.

Механизаторҙар коммунист, йырсы Сәлим Әминев, баянист Марат Сынбулатов, ҡурайсы Юлай Юнысов, оҙаҡ ҡараусы Анна Морозова, медицина работнигы Миңһылыу Әминева, пенсионерҙар Александра Ивановна Строгова, ашнаксы А. Д. Еремеева, сусҡа ҡараусы М. Чуднова һәм ошҡа бик күптәр актив ҡатнашты.

Сажиҙә Сынбулатова менән Любовь Беляева, ауыл культура йорто етәкселәре булараҡ, художестволы үҙешмәкәрлектең сығышын ойоштороу менән генә сикләнмәй, ә агитмасса эше лә алып бара. Даими рәүештә «Боевой листок», «Молния» сығаралар. Ауылдаштарын район, колхоз яңылыҡтары менән таныштыралар, производство алдынғылары тураһында һөйләйҙәр.

Культура йорто һәр ваҡыт таҙа, йыйнаҡ, Федоровка ауылы халҡы унда кинәнеп ял итә ала. Был — йәш белгестәр, комсомолкалар С. Сынбулатова менән Л. Беляеваның тырышлығы һөҙөмтәһе.

Б. ӘЛИБАЕВ,
колхоздың партия ойошмаһы секретары.

ҺҮРӘТТӘ: Федоровка ауыл культура йортоноң художество етәксеһе С. Ф. Сынбулатова.
Р. БАЙМУРЗИН фотоһы.

◆ *Депутат эштәре: тәжрибә, проблемалар*

Халыҡ мандаты менән

Халыҡ депутаттарының Байгускар ауыл Советы башҡарма комитеты халыҡ араһында массовый эштәрҙе ойоштороған саҡта депутаттарҙың ирҙамына таянып эш итә. Фотографияһы «Иң яҡшы кешеләр» таҡтаһына ҡуйылған депутат Х. Н. Дәүләтбирзинды иң активтарҙың береһе тип атанылар.

Хәкимйән Дәүләтбирзин ауыл Советына депутат итеп тәүге йыл ғына һайланмай, ауылдаштары һуңғы ике саҡырылышта уға юғары ышаныс күрһәтә, һәм ул был ышанысты үҙенең шәхси өлгөһө, Совет, һайлау округы эшендә актив ҡатнашыу менән аҡларға тырыша.

Бер саҡ ул сессияла шәхси хужалыҡтарҙа тәртип булдырыу, ауылды төҙөкләндереү һәм «Өлгөлө ауыл» исеме өсөн көрәш ойоштороу тураһындағы мәсьәләне күтәреп сыҡты. Был башланғыс һәр кемдең күңеленә хуш килде. Мәсьәлә Советта тикшерелде һәм үҙең йәшәгән йортто, шәхси хужалыҡты, урамды, ауылды тейешле тәртипкә килтерергә һәм бөтә ауыл халҡы менән бергә социалистик ярышҡа ҡушылырға тигән дөйөм фекергә киләләр.

Инициатива шәхси өлгө менән баһалана. Хәкимйән Дәүләтбирзин оло йыйынды көтеп тормай, үҙ усадьбаһын тәртипкә килтерә башлай. Ауыл ҙур түгел — кемдең нимә менән шөғөлләнеүе һәммәһенә билдәле. Ә байгусҡарҙар — яңылыҡты элеп алырға әҙер торған халыҡ. Һәр кем ишек алдындағы тиҙәкте, сүп-сар ейәмен ситкә сығарып түгә, өйҙәрен, ҡапҡаларын, рәшәткәләрҙе буяй, аҡлай башланы.

Хәкимйән Нафиҡ улы — оло йәштәге ауыл Советы депутаттарының береһе. Округ һайлаусылары уны оло булғаны өсөн генә түгел, ә актив, принципиаль һәм эшһөйәр булғаны өсөн дә хөрмәт итә.

Бер мәл ауыл халҡының ваҡ малы араһында йоғошло ауырыу тарала. Ветеринария службаһы, юғары органдар шундай һырымтаға килә: был сирҙән ҡотолоу өсөн ваҡ малды мотлаҡ рәүештә бөтөрөргә кәрәк. Бер кем дә тәү башлап үҙ малын бөтөрөргә баҙнат итмәй. Х. Н. Дәүләтбирзин, депутат, коммунист булараҡ, тәүгеләрҙән булып үҙенең бөтә ваҡ малын ит комбинатына оҙата. Башҡаларҙы ла ауыл Советы башҡарма комитеты ҡарарына буйһонорға мәжбүр итә. Үҙе депутат булып һайланған округта ул зарарланған малдарҙан ҡотолорға кәрәклеге тураһында аңлатыу эштәре алып бара.

Депутат Х. Н. Дәүләтбирзин үҙ һайлаусыларын яҡшы белә. Улар күп түгел — округҡа биш йорт инә. Уларҙа нигеҙҙә оло йәштәге кешеләр йәшәй. Шуға күрә уға йыш ҡына үҙенә йөрөп, уларҙың тормош-көнкүреш шарттары менән ҡыҙыҡһынырға тура килә. Депутат үҙ һайлаусыларына Совет эшендә ҡатнашыуы тураһында һөйләй, шул уҡ ваҡытта ул ауыл Советы башҡарма комитетында — округтағы эштәре, сессияла — малдарҙы ҡыштатыуға әҙерлек тураһында отчет менән сығыш яһай.

— Мин ғаиләләрҙә булып, һайлаусылар алдында отчет биреүҙе һәм ауыл Советының мөһим-мөһим ҡарарҙарын уларға ирекле һөйләшеү формаһында еткереүҙе хуп күрәм, — тип һөйләй Хәкимйән Нафиҡ улы — Әгәр халыҡты Совет эштәренә ылыҡтырыу кәрәклеге килеп тыуһа, был бигерәк тә мөһим. Аралашыуҙың ундай ысулы үҙен аҡлайҙыр, тип уйлайым, сөнки бөтә һайлаусылар менән дә осрашыу мөмкинлеге тыуа. Улар ҙа үҙҙәрен иркен тота, фекерҙәрен асыҡтан-асыҡ әйтеп бира, иҫкәрмәләр яһай, тәҡдимдәр индерә, үҙҙәренә тормошо тураһында хәбәр итә. Быйыл икеләтә файҙа күрелә: халыҡҡа Советтың эше тураһында белгертәм, улар менән осрашыуҙан күп кенә файҙалы мәғлүмәттәр алам. Былар-ҙың барыһы ла эште ниндәй йүнәлештә алып барырға, кемдең ирҙамына таянырға кәрәклеген асыҡларға булышлыҡ итә.

Яңыраҡ ауыл Советы депутаттары инициативаһы менән тыныслыҡ йәрминкәһе ойоштороло. Унда бөтә 25 округтың да һайлаусылары ҡатнашты. Йәрминкәнең ойоштороу яғы күпселеге менән депутаттарға, уларҙың округтарҙа аңлатыу эше уҡтәреүенә бәйле ине. Хәкимйән Дәүләтбирзин, үҙ округы буйлап йөрөп сығып, кешеләргә уҙғарыласаҡ сараның әһәмиәтен, ниндәй әйберҙәргә талаптың күберәк булыуын, ҡайһыларын әҙерләүҙең еңелерәк икәнен аңлатыу кәрәклеген артыҡ тип тапманы. Уның хеҙмәт һөҙөмтәләре төрлө әйберҙәр һатыуҙан килгән табышта күренде. Һайлаусылар ҙа йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне: Тыныслыҡ фонды иҫәбенә 80 һумдан ашыу йәғни һәр йорттан уртаса 16-шар һум (ауыл буйынса 11 һум) тапшырылды.

Халыҡ вәкиле Х. Н. Дәүләтбирзинға ауыл Советы башҡарма комитеты янындағы эскелекә һәм алкоголизмға ҡаршы көрәш буйынса комиссия председателе сифатында профилактик, агитмасса эшен уҡтәреүгә күп көс түгергә тура килә. Эш бит берәй ваҡиғанан һуң яза биреүҙә түгел, уны иҫкәртергә кәрәк, ә мәжбүр итеүҙе депутат иң һуңғы сара тип иҫәпләй. Әлбиттә, һаман «йәшел йылан» артынан ҡыуыусылар һәм эшкә ҡыҙмаса килеүселәр юк түгел әле. Уларға актттар төҙәлә, сөнки хоҡуҡ тәртибен бәҙәу факты күҙ алдында бит.

Депутат Х. Н. Дәүләтбирзин ауыл Советының культура-һаулыҡ һаҡлау һәм халыҡ мәғарифы буйынса даими комиссияһы ағзаһы булараҡ та социаль золомға ҡаршы, өлгөлө ауыл өсөн көрөшкә саҡыра. Ошо комиссия эштәре буйынса депутатты ингеҙ йыллыҡ мәктәптә лә, медпункт һәм китапханала ла осратырға мөмкин.

Совет ултырыштарында депутат үҙ фекерҙәре менән уртаҡлаша, шунан һуң коллегиаль ҡарарҙар ҡабул ителә.

Халыҡ мандаты быны шулай эшләү бурысын йөкмәтә.

Ф. ТАҢҒАТАРОВ.

Агитация һәм оперативлылыҡ

Күптәр, күргәзмә агитация хәҙер, ысынлап та, тормоштан артта ҡала, ҡайны саҡта хужалыҡтағы эштәрҙең торошона ыңғай йоғонто яһай алмай, тип иҫәпләй.

— Мәсьәлә ябай түгел, — ти Калинин исемендәге колхоздың партбюро секретары Ғ. Ғ. Баймурзин. — Был, моғайын, күргәзмә агитацияның да үҙгәртеп короуға мохтаҫлыҡ кисереүенән килеп сығалыр.

Күргәзмә агитация средстволары бөтөһенән әлек конкрет, сағыу, хеҙмәт коллективы тормошона ярашлы булырға тейеш. Ыңғайлы сағыштырып ҡарау урынлы булыр ине. Мәҫәлән, алдынғылар ниндәй һөҙөмтәләргә өлгөшә һәм артта нәйәлеүселәр нисек эшләй?

Ғәҙәттә күргәзмә агитация «Молния» һәм «Боевой листок»тарҙа хәбәр ителгән фактар нигеҙендә йыйналандырыла. Ыңғай

Интенсивлаштырыу курсы менән

Ҙур яуаплылыҡ тойоп

Тотоноуҙарҙы контроллаҙаҙ чек системаһын ҙәләштерен, «Хәйбулла» совхозының бөтә подразделениелары ошо йылдың ғинуарынан алып тулы хужалыҡ иҫәбенә күсте.

Беҙҙең Хоҙайбирҙин бүлексәһендә биш бригада аренда подрядында эшләй. Шуның икәүһе —баҫыусылыҡта. Бригадалар ес звеноға бүленгән. Һәр звеноға тракторҙар, башҡа ауыл хужалығы машиналары беркетелгән. Бүлексәлә 5079 гектар һөрентө ер иҫәпләнә. Эш планы буйынса шуларҙың 2546 гектарында — иген культуралары, 1957 гектарында күп йыллыҡ үләндәр үҫтерәсәкбеҙ, ә 576 гектары — ҡара пар ере.

Беҙҙең механизаторҙар беренселәрҙән булып тырматыуға төштө, һәм алға ҡуйылған бурысты уңышлы үтәне. Сиратта — сәсеү эштәре. Унда 9 агрегат ҡатнашасаҡ. Хәҙер уларҙың бөтәһе лә әҙер, орлоҡ сәсеү нормаһы күмдереү тәрәнлегенә ентеклән көйләнде. Фәкәт ошо көндәрҙә бер нисә сәсеү агрегаты эшкә төштө. Бер йыллыҡ үләндәр сәсә башланыҡ.

700 гектар майҙанда бойҙайҙы интенсив технология буйынса һәм 100 гектар майҙанда сәкәне менән бергә йыйып алыу өсөн ҡуҡуруҙ үҫтерәсәкбеҙ. Һәр гектарға физик ауырлыҡта 170 килограмм иҫәбенән етерлек күләмдә минераль ашламалар тупланыҡ. Дөрөҫ, РУМ-8 һәм РМГ-4 агрегаттары юҡлыҡтан, ҡыйынлыҡтар кисерәбеҙ.

Үҙебеҙҙең баҫыуҙарҙа Саратовская-55 бойҙайын үҫтерәсәкбеҙ. Беҙҙең шарттарҙа ул үҙен яҡшы яҡтан күрһәтте. Дым ҡаплауҙағы кеүек, иген сәсеүсе агрегаттар ҙа ике сменаҙа эшләнәсәк.

Бөгөн эштең уңышын нигеҙҙә ябай эшселәрҙең инициативаһы һәм белеп ойошторолған үҙаллылыҡ хәл итә. Ләкин ҡайһы берҙә беҙҙең механизаторҙарҙа тап бына шундай сифаттарҙың етмәүе һиҙелә, ә бит тәжрибәле игенселәр яҡшы рационализаторлыҡ тәҡдимдәрен индерә ала. Йыш ҡына өҫтән бирелгән күрһәтмәгә буйһонорға мәжбүр булабыҙ. Мәҫәлән, 3-сө бригадала 15 иген комбайны бар. Әгәр нагрузка буйынса ҡараһаң, уларҙың 10-ы ла етер ине. Ул саҡта ике комбайнды резервҡа ҡуйырға, 3-һен орлоҡ һәм ашлама тейәүгә, бесән әҙерләүгә үҙгәртеп ҡорорға мөмкин. Ләкин инженер службаһы ундай тәҡдимгә ҡаршы. Бригаданың инициативаһы хупланмаған көйө ҡалды.

Шулай ҙа хеҙмәтте ойоштороуҙың яңы формаһын производствоға индереүҙә билдәле бер уңыштар бар. Бүлексәлә 793 гектар майҙандыҡ күп йыллыҡ үләнен сабып алырға кәрәк. Аренда подрядын индергәнгә тиклем күп йыллыҡ үләндәрҙе өҫтәп сәсеү менән ошраҡлы рәүештә генә шөғөлләндек, уларға тәрбиә булманы тиерлек. Һөҙөмтәлә түбән сифатлы бесән алынды. Бригада коллективы яҙғы баҫыу эштәре башланырҙан байтаҡ ваҡыт алда уҡ әле ошо мәсьәләне тикшерҙе. Ҡыш көнө күп йыллыҡ үлән баҫыуҙарында буй һәм арҡыры йүнәлештә ҡар тотолдо. Яҙғы осорҙа тупраҡты йомшартыу маҡсаты менән тырматып сығтыҡ, минераль ашламалар менән өҫтәмә туҡландырҙыҡ. Артабан ҙур ғына майҙанды орлоҡҡа ҡалдырып, 150 гектар майҙанда күп йыллыҡ үләндә йыл-һайын яңыртып торорға ҡарар ителде.

Күп йыллыҡ үлән һәм сәкәнгә ҡуҡуруҙ сәсеүҙән тыш, мал аҙығы базаһын нығытыу маҡсатында 424 гектар майҙанға бер йыллыҡ үлән сәсеүҙе планлаштырабыҙ. Әйтергә кәрәк, йыш ҡына бер йыллыҡ үләнде һуңлап йыйып алабыҙ, уны хатта һаламдан айырыуы ҡыйын була.

Хәҙерге ваҡытта 166 гектар һуғарыулы участкабыҙ бар. Һыу алыу өсөн быуа төҙөлә. Беҙҙең һыу һаҡлағыс 70—75 гектарға яҡын майҙанды биләйәсәк. Уны төҙөп бөтөргәс, һуғарыулы участка майҙанын 300 гектарға тиклем еткерергә уйлайбыҙ, хәҙерҙән ҡ ҡ ҡ

Һеҙҙе нисек хеҙмәтләндерәләр?

ЭШТӘР ЯҠШЫРА

Район производство идаралығы коллективы быйыл халыҡҡа конкурс хеҙмәте күрһәтеүҙә яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшә. Тегенселәр берәнсе квартал пландарын бөтә күрһәткестәр буйынса ла үтәне.

Аҡъяр конкурс йортонон тегеү цехы коллективының хеҙмәт уңыштарын билдәләп үтке килә. Бында халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеү заданиеһы 132 процентҡа үтәлде. Г. Теләүғолова, Х. Кәипова, А. Павлова, Л. Ҡарабаева, Ф. Байғусҡарова, Л. Труновалар эшһеҙәр һәм тырыш булыуҙары менән айырылып тора.

Кейем бесеүселәр Ф. Нәбиуллина менән Н. Кәримова, кассир-кабул итеүсе Р. Сафиналар намыҫлы эшләй.

Наилә Таулыҡаева 1987 йылда хеҙмәттәге уңыштары һәм социалистик йәкләмәһен арттырып үтәгәне өсөн һөнәре буйынса иң яҡшы тип билдәләнде. Уға ВЛКСМ райкомының Дипломы һәм иҫтәлекле тәҫмә тапшырылды.

Бүребай конкурс йорто ла халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеү буйынса яҡшы эшләй. Н. Долматова, Ф. Кувшинова һәм башҡалар пландарын арттырып үтәй.

В. УСМАНОВ,
СССР Журналистар союзы ағзаһы.

ҺҮРӘТТӘ: Аҡъяр конкурс йорто тегенселәре Г. Теләүғолова, Т. Щербакова (участка мастеры), Н. Таулыҡаева һәм Х. Кәипова.

Автор фотоһы.

«АЛТЫН ҠУЛЛЫ МЕДСЕСТРА»

Район больницаһында йыл һайын «Алтын ҡуллы медсестра» һәм «Райондың иң яҡшы фельдшеры» конкурсын үткәреү һәйбәт традицияға әйләнде. Яңырҙаҡ унда район медсестралары арасында тағы конкурс уҙарылды. Больницаның байрамса биҙәлгән залына участка больницаларынан, үҙәк район больницаһы бүлектәренән конкурста ҡатнашасаҡ 9 кеше, шулай уҡ жюри ағзалары, үҙенсәлекле бәйгене ҡарарға теләүселәр йыйылған.

Конкурста һәр кем үҙенең профессиональ теоретик һәм практик белем кимәлен генә күрһәтеп ҡалманы, ә иң яҡшы медицина газетаһына, хәҙерге медицина проблемалары тураһында һөйләүсе эмблемалар эшләүгә лә конкурс булды.

Төбөгө, һәр ҡатын-ҡыҙ яҡшы хужабикә лә булырға тейеш. Беҙҙең медиктар үҙҙәренең аш-һыу һәм ҡул эштәренә оста булыуҙарын да раҫлай алды. Уларҙың һәр берәһе, «Йәгеҙ әле, ҡыҙҙар!» конкурсындағы кеүек, художестволы үҙешмәкәрлек буйынса һөнәрҙәрен күрһәтергә тейеш. Бер һүҙ менән әйткәндә, намыҫ ҡушыуы буйынса эшләүсе һәр медсестра «алтын ҡуллы» булырға тейеш. Беҙҙең конкурста ҡатнашыусыларҙың һәр берәһе шуны раҫланы. Шулай ҙа ярышта һәр ваҡыт кемдер еңеп сығырға тейеш. Район больницаһы бала табыу бүлегенең балалар палатаһы медсестраһы С. Насироваға «Алтын ҡуллы медсестра» тигән иҫтәлекле тәҫмә тапшырылды. Донъяға яңы килгән сабыйҙарҙың шундай ҡулдарға эләгеүе ҡыуаныслы, әлбиттә. Ул Грузиялағы «Махинджаури» пансионатына бушлай путевка менән бүләкләнде.

Хәйбулла участка больницаһы медсестраһы Н. Баимова икенсе урынды яуланы, ә өсөнсө урын Бүребай участка больницаһы вәкиле Т. Гапоненкоға бирелде.

М. БОХАРБАЕВ,
район больницаһының балалар бүлеге мөдире.



ҺҮРӘТТӘРҘӘ: еңеүсене ҡотлау.

В. УСМАНОВ фотоһы.

Спорт

УҢЫШЛЫ СЫҒЫШ ЯҺАНЫЛАР

110-сы СПТУ теннисистары Учалы ҡалаһында профтехучилищелар араһында өстәл теннисы буйынса үткәрелгән зона ярыштарында ҡатнашты. Венер Үтәшев, Наил Нәйләүев һәм Александр Мөхәмәҙиев составындағы беҙҙең команда дөйөм команда зачетында икенсе урынды алды һәм Өфө ҡалаһында үткәрелә торған финал ярыштарында ҡатнашыу хоҡуғына эйә булды.

А. Мөхәмәҙиев шәхси зачетта өсөнсө призлы урынды яуланы.

Беҙҙең район командаһы, уңышлы сығыш яһап, ярышты ойоштороусыларҙы ғәжәпләндерҙе. Был иһә беҙҙә бындай турнирҙарҙың бик һирәк ойошторолоуы тураһында һөйләй, сөнки теннисистарыбыҙҙы райондан ситтә белмәйҙәр әле.

Өстәл теннисы — мауыҡтырғыс уйын. Уның өсөн махсус йыһазландырылған айырым бина талап ителмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул беҙҙә популярлашмаған. Был осраҡта мәктәптәрҙән физкультура уҡытыусылары, хужалыҡтарҙың спорт буйынса методистары ғәйепле.

Район үҙәгендә өстәл теннисы буйынса бер тә ҡәрәк эшләмәй. Ә уны ойоштороу өсөн мөмкинлектәр бар.

А. БАЙҒУСҠАРОВ,
110-сы СПТУ-ның физик тәрбиә етәксеһе.

Уйланырға кәрәк

Ҡышҡы спорт сезоны артта ҡалды. Йомғаҡтар яһарға һәм киләсәккә фәһем алырға ваҡыт.

Профсоюздарҙың ирекле физкультура һәм спорт йәмғиәтенең район советы комсомол һәм профсоюз ойошмалары менән берлектә СССР халыҡтарының IX Ҡышҡы спорт спартакиадаһына арналған культура-һауыҡтырыу эш планын төҙөгәйне.

1988 йылды ҡышҡы спорт сезонын асҡанда «Красный доброволец» «Красное знамя», «Һаҡмар» колхоздары, «Матрай» совхозының саңғысылары актив ҡатнашты.

Быйыл шайбалы хоккей буйынса район ярышы ойошҡаныраҡ уҙғарылды. Район үҙәге командаһы спортҡа сыл төрө буйынса иң көслөһө булып сыҡты, һәм ул профсоюздарҙың ирекле физкультура һәм спорт йәмғиәте район советының 1988 йылғы кәсәнә кубогын яуланы. Талантлы һәм һәләтле йәш хоккейсылар асыҡланды. Улар — «Матрай» совхозынан Сергей Школьный, Бүребай руда идаралығынан Сергей Кочетков, Аҡъярҙан Рим Хәйбирҙин, Әмир Усманов, Мөхәмәт Таулыҡаев һәм башҡалар. Улар республика ярыштарында ла район намыҫын яҡлай ала ҙаҡтарын күрһәтте.

Профсоюздарҙың ирекле физкультура һәм спорт йәмғиәтенең район советы ҡышҡы спартакиада барышында саңғы спортын үҫтереүгә тейешле иҫтибар бирҙе. Физкультура коллективтарының күпселеге саңғы инвентары менән тәьмин ителде. Ҡышҡы сезонды асҡанда 22 коллективтан 9 команда ғына ҡатнашты. Был бик аҙ, әлбиттә. Башҡа саңғы ярыштарында ла массовыйлылыҡ булманы. Бөтә сезон буйына 250 саңғысы ғына ҡатнашты. Район ярыштарына килмәгән «Матрай» (спорт буйынса методисы А. Матросов), «Таналыҡ» (С. Хәкимов), «Хәйбулла» (Посопов) совхоздары, Ленин исемендәге колхоздың (С. Чекунцов) физкультура коллективтары советтарына былай эшләү килешеп етмәй. Был ойошмаларҙа 50-нән алып 100-гә тиклем саңғы бар. Бына йөштәр менән эшләүгә битараф ҡарау, эшкә ҡарата яуаплылыҡ булмау менән генә аңлатырға мөмкин.

Бүребай руда идаралығында ла (спорт буйынса методисы И. Нураев) шундай уҡ хәл. Ҡышҡы спорт сезонында бында 200-зән ашыу комсомолец һәм йәш кешенең береһе лә саңғыға баҫманы.

Ә беҙҙең спортсыларҙың билдәле бер уңыштары бар. Ыйылма команда Белорет ҡалаһындағы зона ярышында ГТО многоборьеһы буйынса икенсе урынды яуланы. Мәләүез ҡалаһында республика беренселегенә уҙғарылған финал ярышында был команда спортсылары өсөнсө урынға сыҡты. Әгәр физкультура коллективтары советтары йәштәр менән бөтә көсөн бирә эшләһә, уңыш та һиҙелерлек булыр ине.

Ҡышҡы спартакиада тамамланды. Хужалыҡтар, предприятиелар һәм учреждениеларҙың спорт ойошмалары эшендә етешһеҙлектәр байтаҡ әле. Профсоюздарҙың ирекле физкультура һәм спорт йәмғиәте район советы ла эштә күп нәмәне ҡулдан ысҡындырҙы, түбәнге подразделениеларға спорт эшендә үҙ ваҡытында практик ярҙам күрһәтеп өлгөрмәне.

Йәй ете. Ул — спорт хәрәкәтендәге иң яуаплы осор. Профсоюздарҙың ирекле физкультура һәм спорт йәмғиәтенең, культура-спорт комплексының район советтары, бөтә йөштәге халыҡты йәлеп итеп район күләмендәге массовый спорт сараларын уҙғарыуҙы планлаштырҙы. Еңел атлетика, массовый халыҡ уйындары, волейбол, футбол һәм спорттың милли төрҙәре алеккесә беренсе планда тора. Бөтә спорт ойошмаларына әҙерлекте бөгөндән башларға кәрәк. Комсомол ойошмалары һәм мәктәптәр уҡыусылары менән берлектә спорт майҙаншыҡтарын, футбол һәм волейбол майҙандарын, йүгереү юлдарын сезонға әҙерләп ҡуйырға кәрәк.

З. ҠАРАБАЕВ,
профсоюздарҙың ирекле физкультура һәм спорт йәмғиәтенең район советы председателе.

ЕГЕТТӘР БӘЙГЕҺЕ

Күптән түгел Әбеш ауыл культура йортонда «Йәгеҙ әле, егеттәр!» конкурсы үткәрелде.

Ауыл йәштәре һәм комсомолецтар был сараға зур теләк менән әҙерләнде.

Механизатор ҙ а р ҙ ы ң «Металлист» командаһы «Браҡыҙ эшләргә!» тигән девиз менән сығыш яһаны. Команда капитаны, хужалыҡтың алдынғы механизаторы Рәйес Заһиҙуллин, ауыл культура тормошоноң активисы булараҡ, был осраҡта ла үҙ командаһын әҙерләүгә көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәне.

«Орленок» командаһының девизы «Дәүләткә— күберәк ауыл хужалығы продукцияһы!» тип аталды. Уның капитаны Хәмит Мөхәмәтов та үҙенең малсылар командаһын яҡшы әҙерләй алды.

Үсергән лесничествоһы лесниктары Фуат Илембәтов етәкселегендә үҙ командаһын «Интеркосмос» тип атаны. Уларҙың девизы — «Еребеҙҙең йәшел ҡалҡанын һаҡлайыҡ».

Һәр командала — бишәр кеше. Уларҙың барыһы ла откорлоҡ, таҡыллыҡ, зиреклек күрһәтте. «Йәгеҙ әле, егеттәр!» конкурсын алып барыусы Илдар Юнысов кисәне юғары кимәлдә ойоштора алды. Музыкаль яҡтан Фәнил Әбделмәнов биҙәне.

Малсыларҙың «Орленок» командаһы, иң күп очко йыйып, еңеп сыҡты.

Тамашасылар кисәне ойоштороусыларға рәхмәт белдерҙе.

Ф. ИСМӘҒИЛЕВ,
ауыл культура йорто директоры.

«ИӘШЕЛ КУХНЯ»

◆ Кесерткәнде ҡулға бейәләй кейеп йыялар, ә аш әҙерләгәндә, ҡулды сәкмәһен өсөн, уны ҡайнар һыу менән бешекләп алалар. Ҡуҙғалаҡты ла ҡайнар һыуҙа сайҡатып алһаң, әсе тәме кәмей төшә.

Редакторы Б. Ғ. НАЗАРҒӨЛОВ.

«АГРОПРОМХИМИЯ» район производство идаралығына ГАЗ-53, ЗИЛ автомашиналарына шофер, бухгалтер, әлҡән экономист, склад мөдире, Т-150 һәм ТД-75 тракторҙарына тракторсылар кәрәк. Тракторсыларға һәм шоферҙарға эш хаҡы хеҙмәткә ҡарап, ә ҡалғандарға штат расписаниеһы буйынса түләнә.

Газетаның был номерын А. МӘМБӨТОВА йыйҙы, Ф. ҠОҘАБАЕВА версткаланы. А. КҮЛБАЕВ, Б. ФӘТТӘХОВ баҫты. Корректоры — М. ИШБУЛДИНА.

БЕҘҘЕҢ АДРЕС: Аҡъяр ауылы, Сиҙәмселәр проспекты, 41.

Телефондар: редактор—2-11-95, редактор урынбаҫары, партия тормошо бүлеге — 2-13-97, редакторҙың дубляж буйынса урынбаҫары, яуаплы секретарь—2-15-95, ауыл хужалығы бүлеге—2-16-95, радиохәбәрсе—2-14-95, хаттар бүлеге—2-13-95, фотохәбәрсе, бухгалтерия—2-14-98.

Газета аҙнаһына өс тапҡыр: шишәмбе, кесаҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт һәм рус телдәрендә сыға.

Башҡорт телендәге газета редактор урынбаҫары Ф. М. ҠОҘАБАЕВ етәкселегендә сығарылды.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәт, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Хәйбулла район типографияһы. Тиражы 2594. Заказ № 307.